**Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение основная общеобразовательная школа с. Верхнетавлыкаево муниципального района Баймакский район Республики Башкортостан**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО. | УТВЕРЖДЕНО. |
|---|---|---|
| на заседании МО. | Зам директора по УВР | Директор школы |
| Протокол 1 от 28.08.23г | «28» 08 2023 | Приказ №54.1 от 29.08.2023 |

# Рабочая программа

курса внеурочной деятельности

# «Тайны родного языка»

для VIII класса

на 2023-2024 учебный год

## Аңлатмалы яҙыу.

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8- се кластары өсөн «Тыуған яҡ сығанаҡтары» исемле кластан тыш эшмәкәрлектең эш программаһы.

Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:

- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
- Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы;
- «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
- Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Кластан тыш эшмәкәрлектең төп маҡсаттарының береһе** - Шәхес тәрбиәләү. Үҙ халҡы, милләте, тарихы менән ғорурлана алған, халыҡтың йыр- моңон күңеленә һеңдергән, тыуған ерен ғәзиз әсәһе кеүек күргән, халҡының рухы, маҡсаты, уй- хыялдары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәгән һәм тыуған теленең ҡәҙерен белеп, уның тотош байлығына эйә булған шәхес тәрбиәләүгә иғтибар бирелә. Уҡыусыла Тыуған илгә, тыуған төйәккә, үҙ еренән күтәрелгән шәхестәргә ихтирам, һөйөү тәрбиләү маҡсатында ошо төбәк тәбиғәтен өйрәнеүгә һәм күренекле әһелдәр менән таныштырыуға байтаҡ ҡына ваҡыт бүленә.

**“Тыуған яҡ сығанаҡтары” буйынса кластан тыш эшмәкәрлектең төп бурыстары:**

-Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе бөтөн милләт вәкилдәре менән үҙ-ара татыу, дуҫтарса мөнәсәбәт булдырыуға булышлыҡ итеү; шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙға күп һанлы милләттәр араһында йотолоп, юғалып ҡалмау, тиңдәр араһында тиң тойоп йәшәү өсөн ниндәй йүнәлештә үҫергә кәрәклеген аңлатыу;

-Тыуған төйәккә, башҡорттарҙың һәм Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәренең мәҙәни ҡиммәттәренә ҡарата һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу уятыу;

-Халҡыбыҙҙың матди һәм рухи байлығы менән таныштырыу;

-Тәбиғәткә һәм тәбиғәт байлығына ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү;

-Йәш быуынды ғаилә торошона һәм үҙаллылыҡҡа әҙерләү;

-Мәҙәниәт, сәнғәт, фән өлкәһендәге күренекле әһелдәребеҙ менән таныштырыу.

**“Тыуған яҡ сығанаҡтары” буйынса кластан тыш эшмәкәрлекте өйрәнеүҙәге талаптар:**

1. Шәхестең рухи-әхлак сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү.
2. Танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеүөсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу (һүҙлектәр, энциклопедиялар, Интернет-ресурс һ.б.).

Башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау.

3. Башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи әхлаҡи ҡиммәттәре менән сағыштырыу.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр:**

**1. Шәхси сифаттарҙы үҫтереү өлкәһендәге үҫеш:**

1) Үҙ милләтен, Ватанын, тыуған яғын яратыу.
2) Этник һәм милли сағылышын таныу:

- Үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау.
- Мәктәп һәм кабинет йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарау.
- Һаулыҡты нығытырға һәм һаҡларға.
- Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә ихтибарлы һәм ихтирамлы булырға.

3) Ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булыу.

5) Динамик үҙгәреүсән һәм үҫтерешле донъяла үҙенең социаль ролен аңлау.
6) Әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булыу.
7) Һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ һәм эмоциональ-әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алыу.
8) Өлкәндәр һәм тиңдәштәре менән төрлө социаль хәлдәрҙә аҡыллы хеҙмәттәшлектең кәрәклеген аңлау һәм бәхәсле хәлдәрҙән сыға белеү.
9) Сәләмәт булыу һәм төрлө шарттарҙан хәүефһеҙ сығыу ҡағиҙәләрен үтәү.

**2. Предмет өлкәһендәге үҫеш:**

1) Телде милли үҙаң нигеҙе булараҡ аңлау.
2) Башҡорт теле Башҡортостандың, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм аралашыу теле булараҡ мәғәнәһен аңлау.
3) Дөйөм мәҙәниәт күрһәткесе, кешенең граждандлыҡ позицияһы булараҡ норматив телмәр һәм яҙма рус телен белеү.
4) Телмәр этикетына, арлашыуҙа төрлө тасуири тел сараларына эйә булыу.
5) Уҡыу өсөн үҙ аллы әҙәбиәт һайлап ала белеү, өҫтәлмә мәғлүмәт алыу өсөн мәғлүмәт сығанаҡтары менән файҙаланыу.
.

**8 класс:**

1. **Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт.** (1 сәғәт).Дуҫтарса мөнәсәбәт һәм мөхәббәт тураһында төшөнсә биреү.
2. **Ғаилә ҡороу.** (1 сәғәт).Ғаилә ҡороу. Элекке замандағы ғаилә мөнәсәбәттәре менән хәҙерге заман ғаилә мөнәсәбәттәре араһындағы айырма.
3. **Боронғо башҡорттарҙа өйләнеү йолалары.** (2 сәғәт). Ҡыҙ әйттереү, туй йолалары.Бөгөнгө йолалар.
4. **Йәш ғаилә.** (1 сәғәт). Ғаилә тураһында закон. Закон һәм намыҫ алдында яуаплылыҡ. Ғаилә ҡорғанда тыуасаҡ балалар алдында яуаплылыҡ тураһында алдан уйларға кәрәклеге.
5. **Бала тәрбиәләү**. (2 сәғәт). Сабый баланан башлап үҫмер балаларға тиклем тәрбиә нигеҙҙәре.
6. **Ир бала тәрбиәһе**. (5 сәғәт). Ир бала тәрбиәһе. Ир балала йәмғиәт алдындағы яуаплылыҡ тойғоho тәрбиәләү. Ир намыҫы. Ир баланың сәләмәтлеге һәм гигиенаһы (Врач кәңәштәре). Атай булыу яуаплылығы. Бала тәрбиәләүҙә атай кәңәшенең роле. Атайҙың бала өсөн өлгө булыуы. Баланы атай рухында тәрбиәләү. Ир бала-ил тотҡаһы.
7. **Ҡыҙ бала тәрбиәһе**. (5 сәғәт). Ҡыҙ бала гигиенаһы (Врач әңгәмәһе). Әсәлек бурысын үтәргә әҙерләнеү һәм әсәй булыу яуаплылығы. Ҡыҙ бала намыҫы (ғиффәт-врач әңгәмәһе). Буласаҡ бала алдында яуаплылыҡ – йәмғиәт алдында яуаплылыҡ ул. Әсә – милләт тотҡаһы. Бала тәрбиәләүҙә әсәнең роле. Бала табыу һәм тәрбиәләү – әсәләрҙең мөҡәддәс бурысы, тәбиғәт ҡануны.
8. **Үгәй атай йәки үгәй әсәй булған ғаиләлә үҙ-ара мөнәсәбәт.** (1 сәғәт).
9. **Ҡарыуы ҡайтҡан атай-әсәйгә мөнәсәбәт**. (1 сәғәт). Өлкән кешеләрҙең холоҡ ғәҙәтенең үҙгәреүе, уларҙы аңлау, яраҡлашыу.
10. **Кешене һуңғы юлға оҙатыу**. (1 сәғәт). Тәрбиәләү, ҡәбер ҡаҙыу, ләхет алыу, өлкәндәрҙең ризалығын алыу тәртиптәре һәм йолалары. Иҫкә алыу тәртибе.
11. **Рухи һәм физик сәләмәтлек**. (2 сәғәт). Рухи һәм физик сәләмәтлектең физик сәләмәтлеккә йоғонтоho.
12. **Этнопсихология тураһында төшөнсә**. (2 сәғәт). Рухи сәләмәтлек тәрбиәләүҙә милли үҙенсәлектең әһәмиәте. Кешенең холоҡ-фиғелендәге сағылыштарҙы өйрәнеүҙә милли үҙенсәлектең әһәмиәте.
13. **Башҡорт халҡының милли үҙенсәлеге һәм заман талаптары**. (2 сәғәт). Заман Һәмйәшәйештең үҙгәрә барыуына ҡарап, тәрбиә эшендә ҡайһы бер яңылыҡтар индереүҙең мөһимлеге.

14. **Этнология тураһында төшөнсә.** (1 сәғәт). Этнология менән шөғөлләнеүсе ғалимдар һәм был фән тураһында ҡыҫҡаса белешмә.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт | 1 | 07.09 | | |

15. **Тормошта үҙ урыныңды таба белеү – һәр кешенең маҡсаты**. (1 сәғәт).

16. **Башҡорттарҙың донъя кимәлендәге сәйәси урыны.** (2 сәғәт). Башҡорттарҙың донъя кимәлендәге сәйәси урыны. Милләттең көсөн һәм абруйын шәхестәр һаны билдәләй. Шәхес тәрбиәләүҙә халыҡ педагогикаһының роле. Кешенең үҙ халҡының рухи байлығына эйә булғанда һәм халҡының яҙмышы менән йәшәп, уға донъя ҡаҙаныштары юғарылығынан баһа биреп өйрәнгәндә генә ысын шәхес була алыуы. Туған тел – рухи байлыҡҡа эйә булыуҙың төп асҡысы.

17. **Башҡортостан Республикаһының ғаилә кодексы тураһында ҡыҫҡаса белешмә**. (1 сәғәт)

18. **Дәреслектә бирелгән һорауҙар буйынса яҙма эш башҡарыу** (1 сәғәт). Уҡыусы яҙма эштә тотош курс буйынса алған фекерҙәрен сағылдырырға тейеш.

19. **Нимә ул "өлгөрөү"? Кем ул "өлгөргән кеше"? Әңгәмә – бәхәс**. (1 сәғәт).

**20. Татыу, матур ғаилә ҡорған, тәрбиәле балалар үҫтергән ғаилә менән осрашып һөйләшеү.** (1 сәғәт). Бындай ғаиләгә барып һөйләшергә йәки класта сәй әҙерләп әңгәмә үткәрергә лә мөмкин.

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт**

- Башҡорт мәҙәниәте:8 синыф/ И.Д.Бураҡаев, М.С.Бураҡаева, М.Б.Юлмөхәмәтов.- Өфө:Китап, 2020.

- «Башҡортостануҡытыусыһы», «Йәншишмә», «Аҡбуҙат», «Аманат», «Йәшлек» гәзит-журналдары.
- Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Исәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия,
- Башҡортхалыҡйырҙары, йыр – риүәйәттәре
- Тормошһабаҡтары М.С. Бураҡаев,
- Бала – сағаныңуйын фольклоры Ә. Сөләймәнов,

**Электрон дәреслектәр:**

- Электрон дәреслек "Башҡортмәҙәниәте" - Өфө: Мәғарифминистрлығы,
- Электрон дәреслек "Музыка" – Өфө: Мәғарифминистрлығы,

- Презентациялар.

**Интернет – ресурстар:**
- Инфо урок.ру,
- Педсовет.ру
- www/kb.ru.

**Материаль-техник ҡулланмалар**
телевизор;
Аудио-видеомагнитофон.

## Календарь-тематик планлаштырыу (8 класс) аҙнаһына 1 сәғәт

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 2 | Ғаилә ҡороу | 1 | 14.09 | | |
| 3-4 | Боронғо башҡорттарҙа өйләнеү йолалары | 2 | 21.09<br>28.09 | | |
| 5 | Йәш ғаилә | 1 | 05.10 | | |
| 6-7 | Бала тәрбиәләү | 2 | 12.10<br>19.10 | | |
| 8-12 | Ир бала тәрбиәһе | 5 | 26.10<br>09.11<br>16.11<br>23.11<br>30.11 | | |
| 13-17 | Ҡыҙ бала тәрбиәһе | 5 | 07.12<br>14.12<br>21.12<br>28.12<br>11.01 | | |
| 18 | Үгәй ата йәки үгәй әсәй булған ғаиләлә үҙ-ара мөнәсәбәт | 2 | 18.01<br>25.01 | | |
| 19 | Ҡарыуы ҡайтҡан атай-әсәйгә мөнәсәбәт | 1 | 01.02 | | |
| 20 | Кешене һуңғы юлға оҙатыу | 1 | 08.02 | | |
| 21-22 | Рухи һәм физик сәләмәтлек | 2 | 15.02<br>22.02 | | |
| 23-24 | Этнопсихология тураһында төшөнсә | 2 | 29/02<br>07.03 | | |
| 25-26 | Башҡорт халҡының милли үҙенсәлеге һәм заман талаптары | 2 | 14.03<br>21.03 | | |
| 27 | Этнология тураһында төшөнсә | 1 | 04.04 | | |
| 28 | Тормошта үҙ урыныңды таба белеү – һәр кешенең маҡсаты | 1 | 11.04 | | |
| 29-30 | Башҡорттарҙың донъя кимәлендәге сәйәси урыны | 2 | 18.04<br>25.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 31 | Башҡортостан Республикаһының ғаилә кодексы тураһында ҡыҫҡаса белешмә | 1 | 02.05 | | |
| 32 | Дәреслектә бирелгән һорауҙар буйынса яҙма эш башҡарыу | 1 | 16.05 | | |
| 33 | Нимә ул “өлгөрөү”? Кем ул “өлгөргән кеше”? | 1 | 23.05 | | |
| 34 | Татыу, матур ғаилә ҡорған, тәрбиәле балалар үҫтергән ғаилә менән осрашып һөйләшеү. | 1 | 24.05 | | |